# ИЖАДИ ШӘХЕС ҮҪТЕРЕҮСЕЛӘР

*"Башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһы" төбәк-ара конкурсы 1996 йылдан башлап үткәрелә. Уның төп максаттары — республика калалары һәм райондарында башкорт телен өйрәнеүҙе ойоштороуға иҫтибарҙы көсәйтеү, укытыу һәм тәрбиәләүҙең яңы, йоғонтолорак ысулдарын табыу, алдынғы педагогик тәжрибәне таратыу һәм, әлбиттә, башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусыһының мәртәбәһен күтәреү. Был һөнәргә ихтыяждың ҙурлығын күҙ алдына килтереү өсөн түбәндәге һандарға мөрәжәғәт итеү ҙә етә.*

*Республикабыҙ мәктәптәрендә 140928 башкорт балаһы белем ала. 835 мәктәптә 56962 укыусы туған телдә укый. Ә башкорт телен предмет буларак 1363 мәктәптә 71265 укыусы үҙләштерә. Дөйөм алғанда, 2198 мәктәптә башкорт милләтенән булған 128227 укыусы туған телен өйрәнә.*

*Башкорт теле менән әҙәбиәтен 3675 укытыусы укыта. Уларҙың 3104 юғары педагогик белемле. 561 укытыусы юғары категорияға эйә.*

*Конкурс хакында тулырак мәғлүмәт алыу өсөн Башкортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының Милли мәғариф, төбәк-ара хеҙмәттәшлек, дәреслектәр һәм укыу әсбаптары нәшер итеү бүлеге мөдире Рәйсә Абдрахман кыҙы Күзбәковаға мөрәжәғәт иттек.*

— 2006—2007 уҡыу йылында тағы ла 20 мәктәптә башҡорт телен өйрәнә башланылар. Йәмғиәт алдында башҡорт теленең ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, туған телдәрҙең милли үҙаң тәрбиәләүҙә әһәмиәтен күтәреү кеүек мәсьәләләр торған мәлдә был конкурстың роле тағы ла арта төшә, — тип башланы һүҙен Рәйсә Абдрахман ҡыҙы. — Ул ижади эшләгән, алдынғы ҡарашлы, һәләтле педагогтарҙы асыҡларға ярҙам итә, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһының мәртәбәһен күтәрә, уҡытыусыға артабан да үҫергә ярҙам итә, яңы эҙләнеүҙәргә дәртләндерә. Был конкурстарҙа еңеп сыҡҡан уҡытыусыларҙың артабанғы яҙмышын күҙаллағанда айырыуса асыҡ күренә.

Конкурста йыл һайын үҙебеҙҙең республиканың ғына түгел, Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәренән дә уҡытыусылар ҡатнаша. Ун йыл эсендә был ярышта 456 уҡытыусы үҙ көсөн һынап ҡараны. Ҡатнашыусыларҙың бәғзеләрен конкурс профессиональ йәһәттән үҫтерһә, икенселәренә ҙур фәнгә юл асты.

Быйыл конкурста 43 уҡытыусы ҡатнашты. Уларҙың өсәүһе Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән килгәйне. Ярышыусылар араһында ни бары ике ир-егет булды. Иң өлкән конкурсантҡа — 53 йәш. Ул Ишембай ҡалаһының республика кадет мәктәп-интернаты уҡытыусыһы Һөйәрғолова Әнисә Булат ҡыҙы. Иң йәш ҡатнашыусыға — 28 йәш. Ул Морат Марат улы Солтанов, Октябрьский ҡалаһы гимназияһында эшләй. Ярышта ҡатнашыусыларҙың уртаса йәше — 38. 15 уҡытыусы ҡала мәктәптәрендә эшләй, ҡалғандары — ауыл мәктәптәре уҡытыусылары.

2002 йылға тиклем төбәк-ара конкурста еңеп сыҡҡан уҡытыусы ”БР-ҙың мәғариф отличнигы” тигән билдә менән, ә лауреаттар Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнә торғайны.

2002 йылдан башлап Башҡортостан Республикаһы Президентының ”Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы”, ”Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән йыл уҡытыусыһы” конкурстары лауреаттарына премиялар тураһында” Указына ярашлы, еңеүселәргә Башҡортостан Президентының премияһы һәм ”Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы” тигән абруйлы исем бирелә.

Конкурс ике этапта үтә. Декабрь-ғинуар айҙарында район һәм ҡалаларҙа, ә республика ярышы мартта уҙғарыла. Беренсе турҙа конкурсҡа тәҡдим ителгән материалдар ҡарала. Артабан конкурс башлана, ҡатнашыусылар программа һәм жюри ағзалары менән таныша, педагогика, психология, башҡорт әҙәбиәте, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы буйынса тест һорауҙарына яуап бирә, ижади эшен башҡара һәм үҙе менән таныштыра. Икенсе турға беренсе тур йомғаҡтары буйынса 15—20 кеше һайлап алына. Унда ҡатнашыусылар ижади эше менән таныштыра, педагогик концепцияһын яҡлай. Был эштәрҙең һөҙөмтәһе буйынса өсөнсө турға 5 уҡытыусы һайлап алына. Финиш һыҙығына сыҡҡан иң көслө уҡытыусылар тәҡдим ителгән тема буйынса дәрес бирә.

Быйылғы ярыш шарттарына бер ни тиклем үҙгәрештәр ҙә индерелде. Тест һорауҙары урынына матбуғат конференцияһы булды, унда ярышта ҡатнашыусылар ”Киләсәк мәктәбе ниндәй булырға тейеш?” тигән темаға фекер йөрөттө. Бирелгән әҫәргә анализ яһау ҙа конкурсанттың һәләтен, интеллектуаль ҡоласын асыҡларға ярҙам итә. Быйыл беҙ яҙыусы Әмир Әминевтың ”Ҡытайгород”, Рәшит Солтангәрәевтың ”Эшләп ашаһаң” әҫәрҙәрен тәҡдим иттек. Һәйбәт эшләгән уҡытыусының һәр ваҡыт үҙ концепцияһы була. Шуларҙы яҡлағанда, үҙенең эшенә анализ яһағанда, педагог һәр яҡтан һөнәренең оҫтаһы булараҡ та, шәхес булараҡ та тулыһынса асыла.

Конкурста ҡатнашыу оҙайлы һәм ентекле эштең һөҙөмтәһе булып тора. Ярышҡа әҙерләнеү — шулай уҡ үҙенә күрә бер тәжрибә мәктәбе. Ғинуар айында Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты базаһында ике көнлөк семинарҙа концепция һәм оҫталыҡ мәктәбе серҙәре ентекле тикшерелде, өйрәнелде.

Дөйөм алғанда, уҡытыусыларҙың кимәле күтәрелә, әҙерлектәре арта. Семинарҙарҙа, конференцияларҙа ҡатнашҡан, әүҙем позициялы уҡытыусылар үҙҙәренең эшендә алдынғы тәжрибәне ҡыйыу ҡуллана. Ҡайһы бер район һәм ҡалаларҙа, мәҫәлән, Әбйәлил, Баймаҡ, Мәләүез, Салауат райондары, Стәрлетамаҡ, Сибай ҡалаларында үҙ конкурсанттарына ныҡ ярҙам итәләр, яҡшы әҙерләйҙәр, уҡытыусыларҙың рейтингын күтәреүгә ҙур иғтибар бирәләр. Һөҙөмтәлә, дөйөм эш тә ота.

Конкурс Әбйәлил, Әлшәй, Архангель, Баймаҡ, Балтас, Бәләбәй, Бөрйән, Дүртөйлө, Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Мәсетле, Учалы, Хәйбулла райондарында, Өфө, Ағиҙел, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ ҡалаларында башҡорт телен үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелгәнен күрһәтте. Был төбәктәрҙең уҡытыусылары йыл һайын конкурста ҡатнаша. Шул уҡ ваҡытта Благовар, Борай, Кушнаренко, Мишкә, Шаран, Яңауыл райондарынан һуңғы дүрт йыл эсендә бер генә вәкил дә булғаны юҡ.

Конкурстың иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе — республикабыҙ ҡалаларында һәм райондарында башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороуға иғтибарҙы арттырыу, уҡытыуҙың һәм тәрбиәнең яңы ысулдарын табыу, алдынғы тәжрибәне таратыу. Ярышта ҡатнашыусылар быға тиклем ҡулланылған педагогик алымдар менән бергә, үҙҙәренең асыштарын да тәҡдим итә.

**— Быйылғы еңеүселәргә ентекләберәк туҡталып китһәгеҙ ине.**

— Уларҙың һәр ҡайһыһы хаҡында әллә күпме һөйләргә мөмкин. Һөйәрғолова Әнисә Булат ҡыҙының еңеп сығыуы һис тә ғәжәп булманы. Баштан уҡ уның башҡаларҙан айырылып торғаны күҙгә ташланды. Бик көслө уҡытыусы. 1979 йылда Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетын тамамлаған. Республика кадет мәктәп-интернатында уҡыта. Дөйөм педагогик стажы — 32 йыл. Беренсе категориялы уҡытыусы. Концепцияһының темаһы: ”Проблемалы-дифференциаль уҡыу-уҡытыу алымдары”. Ул уҡыусыларҙа ижади фекер йөрөтөү ҡеүәһен үҫтереүгә айырыуса ныҡ иғтибар итә. Үҙе лә ижади яҡтан ифрат һәләтле, шиғырҙар яҙа, урындағы ”Торатау” гәзите менән хеҙмәттәшлек итә. Спортты бик ярата. Экскурсоводтарҙың ҡала конкурсында еңеүсе. Асыҡ күңелле, ихлас, ҙур йөрәкле, яҡты кеше.

Нәғимә Хәсән ҡыҙы Вәлиева Өфө ҡалаһы Октябрь районының 136-сы башҡорт гимназияһында уҡыта. Уның да эш стажы ҙур — 22 йыл. Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы. Уҡыусылары республика олимпиадаларында йылдың-йылы бик яҡшы сығыш яһай. Эшендә халыҡ педагогикаһына ҙур иғтибар бирә. Шулай уҡ шиғырҙар яҙа.

1999 йылда ғына Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған Фәйрүзә Юныс ҡыҙы Иштанова Өфө ҡалаһының 122-се башҡорт гимназияһында эшләй. Юғары категориялы уҡытыусы. Тырыш хеҙмәте өсөн Мәғариф министрлығының, Өфө ҡалаһы хакимиәтенең, Калинин районы мәғариф бүлегенең Маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән. Педагогик эшмәкәрлеге концепцияһының темаһы:

”Ижади шәхес үҫтереү алымдары”. ”Беҙ баланы белемгә өйрәтәбеҙ, ә ул уны ҡайҙа һәм нисек ҡулланырға икәнен аңлап етмәй. Бала көнөлендә башҡорт телен мотлаҡ белеү мохтажлығын уятыу ҙа, дәрестә алған белемде ҡуллана алырлыҡ мөхит тыуҙырыу ҙа уҡытыусы иңендә”, — ти Фәйрүзә Юныс ҡыҙы.

Рәсимә Насирйән ҡыҙы Ҡәйепова Сибай ҡалаһының Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге 13-сө дөйөм белем биреү мәктәбендә эшләй. Беренсе категориялы уҡытыусы. Уҡыусыларында милли рух үҫтереүҙе, шәхес тәрбиәләүҙе, заман талаптарына яуап бирә алырҙай белемле кешеләр әҙерләүҙе үҙенә маҡсат итеп ҡуйған тынғыһыҙ, янып йәшәүсе уҡытыусы. Оҫта телле, сая һәм күңелсәк тә үҙе.

Мәүлиха Фәрит ҡыҙы Дәүләтшина республика башҡорт лицей-интернатында уҡыта. Юғары категориялы уҡытыусы. Эш стажы — 21 йыл. Мәғариф министрлығының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән. Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы. ”Сәсән рухлы, сәсән телле кешеләр һәр кем менән уртаҡ тел таба. Үҙемдең концепциямда ошондай сифаттарҙы формалаштырыу, уҡыусыларҙың ижади һәләтен үҫтереү аша ижади үҫешкән шәхес тәрбиәләүҙе күҙ уңында тотам”, — ти Мәүлиха Фәрит ҡыҙы. Эш һөҙөмтәләре уның хыялдарын бойомға ашырып йәшәй белеүен дәлилләй. Республика олимпиадаларында уҡыусылары һәр саҡ уңышлы сығыш яһай.

Башҡа номинациялар буйынса еңеп сыҡҡан уҡытыусыларҙың да һәр ҡайһыһы хаҡында ошондай уҡ маҡтау һүҙҙәре әйтергә мөмкин. Конкурс ысын мәғәнәһендә оҫталар бәйгеһе булды.

**— Ярышта ҡатнашыусылар ҙа, тамашасылар ҙа конкурстың йылдан-йыл ойошҡаныраҡ, сағыуыраҡ, шул уҡ ваҡытта йөкмәткелерәк үтеүен билдәләй.**

— Быйыл конкурс Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт гимназия-интернаты нигеҙендә үтте. Мәктәп етәкселегенең ярҙамы әйтеп биргеһеҙ ҙур булды. Конкурсты асыу һәм ябыу тантаналары тамашалы булыуына сценарий авторы Сәрүәр Сурина менән режиссер Альмира Ҡыуатова күп көс һалды. Йыл һайын Башҡорт дәүләт педагогия университеты, Башҡорт дәүләт университеты, Стәрлетамаҡ педагогия академияһы уҡытыусылары, Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институты белгестәре беҙгә эскерһеҙ һәм ихлас ярҙам күрһәтә. Шулай уҡ бағымсыларыбыҙ ”Башнефть”, ”Башинформсвязь” акционерҙар йәмғиәттәре етәкселәренә, ”Учколлектор” етәксеһе Ш.С.Түләбаевҡа, Күмертау ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайына, республика киң мәғлүмәт сараларының барыһына ла рәхмәтлебеҙ.

Туған телдең йәшәүе һәм артабан үҫеүе — дөйөм эшебеҙ һәм уртаҡ мәнфәғәтебеҙ.

*Әңгәмәне Гөлсирә ҒИЗЗҘТУЛЛИНА әҙерләне.*